**ИМАНҒА ЫНТЫЛЫҒЫҘ**

Иман һүҙе еткерәм ,

Алла бар- тип мин беләм.

Яманлыҡты ҡуйығыҙ,

Яҡтылыҡта тороғоҙ,

Иманға ынтылығыҙ.

Алла ҡоло булығыҙ.

Эскелек, ул яманлыҡ,

Ғәйбәт һүҙ, ялағайлыҡ.

Алдашыу һәм урлашыу,

Тамуҡҡа китеп барыу.

Гонаһта булыр ҡалыу,

Мәңгелек утта яныу.

Изгелек эшләү яҡшы,

Тормошоң булыр яҡты.

Һаран булыу, нәпселек,

Байлығың ҡалыр сереп.

Ҡас гонаһтан һин елеп,

Тәүбәгә кил һин елеп.

Гонаһ шешең күбәйер,

Ауырыуың көсәйер.

Еңә алмаç дарыу ҙа,

Килегеҙ һеҙ иманға.

Бирелегеҙ Аллаға,

Ҡотҡарыусы Хоҙайға.

Иман юлын мин беләм,

Тыйылыу кәрәк гелән.

Самагонды ҡойоуҙан.

Хәмерҙе ҡулланыуҙан,

Наркотикты ҡаҙауҙан.

Гонаһ ҡоло булыуҙан.

Атайһыҙ баллар тыуа,

Фәхишәлек һин ҡылма.

Атаң, әсәң хөрмәт ит,

Аҡһаҡалды тыңлап үт.

Ололарҙы ҙурлап кит.

Таҙалыҡҡа барып ет.

Әшәке һүҙҙе белмә,

Матур һүҙҙәрҙе һөйлә.

Auҙлыҡ булыр телдә.

Иманға килеүеңдә,

Гонаһтан тыйылыуҙа.

Яманлыҡты ҡуйыуҙа.

Гонаһлы йәшәй бәндә,

Алла бар – тип белмәһә.

Аҡланыу Ерҙә, эҙлә ,

Ҡиәмәт Көнө килә.

Хөкөм Батшаһын күреү,

Һуң булыр бит үкенеү.

Үлмәç борон килегеҙ,

Иманда терелегеҙ.

Камил булһын иманың,

Килерһең тип уйлайым.

Аҡлар Ерҙә Хоҙайың.

Гонаһлы һинең ҡаның.

Яҙаһын бирҙе Алла.

Йәшә һин Ерҙә бала.

Ғүмер буйы эҙләрһең,
Күктә һин теҙләнерһең.
Хөкөм итәмен йәнең,
Һөйләй алмаҫ бит телең.

Тән балсыҡ Ерҙә серей,
Йән сыға ул бит үлмәй.
Яуапҡа ул тартыла.
Иманлылар ҡотола,
Хөкөм булмай уларға.
Тоғоро булғандарға.

Алла Һүҙендә хаҡлыҡ,
Тыңла йырымды халыҡ.
Бер эштә генә ашыҡ,
Иман юлына һин сыҡ.
Иман юлы булыр тар,
Шул юлдан ғына һин бар.

Шатлығым артыр шунда,
Йөҙҙән берәү аңлаһа.
Иман юлына сыҡһа,
Аҙашҡамын тип тапһа,
Хоҙайым ылыҡтырһа.
Иманға яҡынайтһа.

Бөйөк Алла – Ул берәү,
Иманлыға – Ул терәү.
Бөтә нәмә Алланан,
Күренмәгән тын алған.
Данлармын мин туҡтамам,
Туҡтатыр мине Аллам.

Яҡшылыҡ һәм яманлыҡ,
Тыйған емеш – ашамлыҡ,
Татлы емеш- күп бында,
Тыйыл һин гонаһ ҡылма,
Язаһын бирҙе Аллам,
Ер Ҡәһәрләнде алдан,

Насип итҺен тип ожмах,
Иретһен йөрәктә таш,
Бойһоноу кәрәк беҙгә,
Тик Алланың Үҙенә,
Йәшәгән саҡта Ерҙә,
Унық Изге Һүҙенә.

Көндә шиғыр яҙҙыра,
Эргәмдә тере Алла.
Данла ти мине бала,
Мәрхәмәтең киң Алла,
Ҡыл Күпере – Хоҙайға,
Хеҙмәт итегеҙ Уға.

Алла ҡоло булығыҙ,
Иманда Һеҙ тороғоҙ,
Тоғро хеҙмәт итегеҙ.
Яҡтылыҡта йөрөгөҙ,
Мөхәббәт Алла һы ул,
Талантарын бирер мул.

Тереклек Һине данлай,
Һандуғастарың һайрай,
Йондоҙҙарың емелдәй,
Тик кеше Һине белмәй,
Көндә тик үҙен уйлай,
Нисек һуң ул оялмай.

Оялғаны бик аҙҙыр,
Иманға ынтылалыр,

Тик ҡараңғы донъяла,

Тағы аҙашып ҡала,

Килтер уларҙы Алла,

Ылыҡтыр Һин иманға.

Алданмағыҙ донъяға,

Ҡыҙыҡмағыҙ һеҙ малға,

Машинаға, аҡсаға,

Бар нәмә Ерҙә ҡала,

Тутыҡлана, тарҡала,

Байығыҙ Һеҙ иманға.

Барабыҙ беҙ Аппаға,

Ике Китабы ҡулда,

Хөкөм – Китабы һулда,

Тормош – Китабы уңда,

Иманлылар юл таба,

Ожмахҡа килеп тула.

Айра Күктә Хоҙай,

Унда аҡланыу булмай,

Һарыҡтарҙы уң яҡҡа,

Керә улар ожмахҡа,

Кәзәләрҙе һул яҡҡа,

Мәңгелек һүмәç утҡа.

Һуңламағыҙ килегеҙ,

Хоҙайҙа юл белегеҙ,

Хаҡиҡәт, тормош Унда,

Һынау тотабыҙ бында,

Бойһоноғыҙ Аллаға,

Ынтылығыҙ иманға.